# Әҙәбиәт уҡытыу методикаһының-

- Максаты
- Бурыстары
- Принциптары

# Маҡсаты:

- Әҙәбиәтте уҡып өйрәнеү нигеҙендә уҡыусыларға эмоциональ-эстетик йоғонто яһау, әҙәбиәт тарихы, теорияһы буйынса белем биреү аша эстетик зауыҡ, нәфис әҙәбиәткә мөхәббәт, әхлаҡ тәрбиәһе биреү,донъяға фәнни ҡараш формалаштырыу, логик һәм образлы фекерләү, телмәр культураһын үҫтереү маҡсаттары тормошҡа ашырыла.

Башҡа фәндәр системаһында тотҡан үҙенсәлекле урынын билдәләп, уҡытыусының эшмәкәрлеген һүҙ сәнғәте саралары ярҙамында гармоник үҫкән шәхесте формалаштырыу маҡсатына йүнәлтә.

# Бурыстары:

- *Уҡыусыларҙы рухи байлығыбыҙҙың иң ҙур ҡаҙанаштырының береһе-нәфис әҙәбиәт гәүһәрҙәре менән таныштырыу нигеҙендә уларҙы замандың рухи тормошона яҡынайтыу, әҙәбиәт, сәнғәткә ныҡыраҡ йәлеп итеү, шуның менән дөйөм художество үҫешен, дөйөм культура кимәлен күтәреү бурыстары хәл ителә*

# Принциптары:

- *Әҙәбиәт уҡытыуҙы заман талаптары юғарылығына күтәреү-әҙәби тексты тәрән өйрәнеү, уның образлы туҡымаһына иғтибарҙы көсәйтеү, йөкмәткеһен уҡыусыларҙың тойғо менән ҡабул итеүенә ирешеү тигән һүҙ ул. Әҙәбиәт ғилеме, тел ғилеме буйынса бирелергә тейешле мәғлүмәттәр әҙәби әҫәр менән бәйләнештә өйрәнелә һәм һәр әҫәрҙең идея-эстетик асылын тәрәнерәк үҙләштереүгә хеҙмәт итә.*

# Әҙәбиәт:


- М.Ғ. Ғималова «5-11 кластарҙа башҡорт әҙәбиәтен уҡытыу методикаһы»
- М.Ғ.Ғималова, Ғ.Б. Хөсәйенов “Башҡорт әҙәбиәтенән программалар 5-11 синыфтар өсөн»